Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

**фестиваль - конкурс сценарийы:**

# Йомро – йомро йомғағым

*(Ҡала масштабында балалар баҡсалары араһында 3 – 7 йәшлек балалар араһында әкиәт һөйләү бәйгеһе)*



# “Йомро – йомро йомғағым”
# фестиваль – конкурсы сценарийы

*Сәхнәлә “Әкиәт иләндә” йырының көйө башлана, балалар әкиәт геройҙары кейемендә бейеп сығалар. Ике алып барыусы йыр башлай. Йыр бөткәнсе бейеү дауам итә. Залда тамашасылар араһында әкиәт геройҙары кейемендә тәрбиәселәр ҡуша бейей. Балалар сыға. Ике алып барыусы уртала ҡала.*




**1– се алып барыусы Г. Р.**: Һаумыһығыҙ хөрмәтле тамашасылар!

**2 – се алып барыусы З. В.**: Хәйерле көн кескәй дуҫтарыбыҙ.

**1– се алып барыусы**: **Г. Р** Беҙ һеҙҙе “Йомро – йомро йомғағым” фестиваль – конкурста күреүебеҙгә бик шатбыҙ.

**2 – се алып барыусы**: Гөлнәзирә, ҡара әле күпме тамашасылар йыйылған.




**1– се алып барыусы: Г. Р** Зимфира, сәхнә бит ул тамаша, ҡараһаң күҙ ҡамаша

**2 – се алып барыусы**: Ысынлап та, күпме күҙҙәр беҙгә ҡарап төбәлгән.Улар бит беҙҙән ниндәйҙер тылсым көтәләр!

**1– се алып барыусы: Г. Р** Тылсымлы әкиәт донъяһына, республикабыҙҙа уҙғарылған мәҙәниәт йылын арналған “Йомро – йомро йомғағым” әкиәт һөйләүселәр фестиваленә рәхим итегеҙ.

**2 – се алып барыусы**: Бөгөн бында Сибай ҡалаһы балалар баҡсаларының башҡорт төркөмдәрендә тәрбиәләнеүсе балалар сығыш яһаясаҡ.

**1– се алып барыусы**: **Г. Р** Улар бит, һәр балалар баҡсаһында үткәрелгән әкиәт һөйләү бәйгеһендә еңеп, ҙур баһа яулаусылар.




**2 – се алып барыусы**: Бәйге булғас жюри ли булырға тейеш. Бәйгене башлар алдынан жюри ағзаларын атап әйтеп китәйек:

1. **Зифа Васил ҡыҙы Калимуллина –Сибай ҡала**

**мәғәриф бүлегенең профсоюз ойошмаһының рәисе**

2. **Таңһылыу Фәтих кыҙы Ғәйнуллина – Сибай калаһы башкортары королтайы ағзаһыщдщ**
3. **Мәүлизә Закир кыҙы Юнысова - методист**
4. **Лира Радик кыҙы Иштакбаева - методист**
5. ***Айһылыу Мирсәит кыҙы Моталлапова*** **- методист**



**1– се алып барыусы: Г. Р** Алкышлап жюриларҙы каршы алайык, һәр бәйгесегә дөрөҫ баһа бирерҙәр тип ышанып калабыҙ.




**2 – се алып барыусы**: Беренсе бәйгесене каршы алығыҙ **. “Әкиәт”** балалар баксаһында тәрбиәләнеүсе **Әминева Гөлсиә,** ***уға 6 йәш.*** Ул безгә бөгөн “**Алтын балта”** әкиәтен алып килгән. Рәхим ит.

**1– се алып барыусы** Акбуҙат балалар баксаһында тәрбиәләнеүсе ***Кыздарбекова Руфинаға 4 йәш.*** Ул безгә “**Бесәй менән сыскан”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит.

**2– се алып барыусы: ”Айгөл”** балалар баксаһынан 6 йәшлек **Райманова Элина** **“Бәләкәй кайын”** әкиәтен һөйләй ишеттерергә теләй. Рәхим ит.




**1– се алып барыусы: “Акһылыу”** балалар баксаһынан 3 йәшлек **Әхмәтова Элина “Йомро икмәк”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит.

**2– се алып барыусы: Мусин Ильдар “Әкиәт”** балалар баксаһына йөрөй, уға 6 йәш. Ильдар безгә **“Әтәс нимә тип кыскыра?”** әкиәтен алып килгән. Рәхим ит.



**1– се алып барыусы Г. Р**: Әкиәт менән һәр саҡ дуҫ йәшәйбеҙ

Әкиәт бит ул серҙәр донъяһы.
Ниндәй моңһоу булыр ине икән
Әгәр ерҙә тылсым булмаһа

**2 – се алып барыусы**: Бик борондан килә әкиәттәр
Яҙылмаған улар бер көндә.
Йылдар үтә, һыуҙар аға
Ә әкиәт йәшәй бөгөн дә.




**1– се алып барыусы**: **Г. Р** Һеҙҙең алдығыҙҙа “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһынан Таланттар йәйғоро бәйгеһендә беренсе урын яулаусы уртансылар төркөмө балалары сығыш яһай. **“Йомроҡай” йыры**

**1– се алып барыусы**: Беҙҙең киләһе бәйгесене ҡаршы алығыҙ. Ул **“Кояшҡай”** балалар баҡсаһынан <u>**6**</u> йәшлек <u>**Сирбаева Наҙлыгөл**</u>. Ул беҙгә **“Бүре менән кәзә бәрәстәре”** әкиәте менән килгән. Рәхим ит.

**2 – се алып барыусы**: **“Аркаим”** балалар баҡсаһынан 6 йәшлек <u>**Юртбакова Әдилә**</u> **“Төлкө менән әтәс ”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит

**1– се алып барыусы**: Киләһе бәйгесебеҙ **“Карлуғас”** балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүсе <u>**Ишемғолова Регина.**</u> уға 6 йәш Ул беҙгә бөгөн” **Сос малай”** әкиәтен алып килгән. Рәхим ит.




**2 – се алып барыусы**: <u>**Исламғолов Рәил**</u> **“Аленушка”** балалар баҡсаһына йөрөй, уға 6 йәш. Рәил бөҙгә **“Намыҫлы бүре”** исемле әкиәт менән килгән. Рәхим ит.

**1– се алып барыусы З. В.**: Беҙҙең киләһе бәйгесебеҙ **“Тирмәкәй”** балалар баҡсаһынан <u>**Иҙелбаева Эвелина.**</u> Эвелинаға 6 йәш. Ул беҙгә **“Етегән йондоҙ”** әкиәтен һөйләргә теләй. Рәхим ит.

**2– се алып барыусы**: **“Сулпылар”** балалар баҡсаһынан 6 йәшлек <u>**Иҫәнбаева Айлина**</u> **“Тыңлауһыҙ куян балаһы”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит.



**1– се алып барыусы З. В.**: Балалар, ә кистәрен кем һеҙгә матур әкиәттәр һөйләй? Кемдәр һеҙҙе батыр, матур, аҡыллы булып үҫһен өсөн барлыҡ көстәрен йәлләмәй?

**2– се алып барыусы**: Әлбиттә әсәй. Беҙҙең киләһе бәйгесебеҙ ғаилә, батырлыҡ тураһында әкиәт алып килгән. Ҡаршы алығыҙ. **“Ҡайынҡай”** балалар баҡсаһынан **<u>Хөсәйенов Арслан.</u>** Уға 6 йәш. Ул беҙгә **“Ҡаһарман батыр”** әкиәтен алып килгән. Рәхим ит.

**1 – се алып барыусы**.”**Баҙлауыҡ**” балалар баҡсаһынан 6 йәшлек




**<u>Азаматова Айзилә</u> “Саҡ менән суҡ”** әкиәтен тәҡдим итә. Рәхим ит.

**2 –се алып барыусы**. Ошо көндәрҙә беҙҙең илебеҙҙә Әсәйҙәр көнө уҙғарыла. Барлыҡ әсәйҙәрҙе лә




байрамығыҙ менән ҡотлайбыҙ. Һеҙгә һаулыҡ, бала бәхете теләйбеҙ.

**1– се алып барыусы З. В.**: *Абубакирова Динара үҙенең улы Дияз менән* әсәйҙәр тураһында йыр бүләк итергә теләй. Рәхим итегеҙ **<u>“Балаҡайым”</u>**



**2– се алып барыусы З. В.**: Бәйгене дауам итәйек. “**Аҡбуҙат**” балалар баҡсаһынан 4 йәшлек **<u>Ишмуллина Әминә</u>**. Ул беҙгә **“Ҡошсоҡ йыры”** исемле әкиәт тәҡдим итергә теләй.

**1 – се алып барыусы Г. Р.**: “**Ҡарһылыу**” балалар баҡсаһына йөрөүсе **<u>Яҡшыбаев Айҙарға</u>** 6 йәш. Ул беҙгә **“Ҡурайсы”** әкиәтен тәҡдим итә. Рәхим ит.




**2– се алып барыусы**: Киләһе бәйгесебеҙ “**Ләйсән**” бюалалар баҡсаһынан 5 йәшлек

**Янбаева Амалия**. Ул беҙгә **“Шишмә тауышы”** исемле әкиәт тәкдим итергә теләй.

**1– се алып барыусы: “Аманат”** балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүсе 6 йәшлек **Ноғоманова Гөлназ “Алтын сәсле малай”** әкиәтен алып килгән. Рәхим ит.

**2- се алып барыусы:** “**Тейенкәй**” балалар баҡсаһынан 6 йәшлек **Жунусова Азалия “ Ай кыҙы ”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит.




**1– се алып барыусы**: “**Кояшкай** ” балалар баҡсаһына йөрөүсе **Ильясов Азаматка** 5 йәш. Ул беҙгә **“Эт үҙенә нисек хужа тапкан?”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит.

**2– се алып барыусы**: Киләһе бәйгесебеҙ 6 йәшлек **Янтурина Айлина** “**Айгөл**” балалар баҡсаһынан килгән. Ул беҙгә **“Бәшмәк, кәзә һәм куян**” әкиәтен тәкдим итә. Рәхми ит.




**1 – се алып барыусы Г. Р.**: Һуңғы бәйгесебеҙ 6 йәшлек Дәүләтколова Нурания “Карһылыу” балалар баҡсаһынан. Ул беҙгә **“Эт үҙенә нисек хужа тапкан?”** әкиәтен тәкдим итә. Рәхим ит.




**2– се алып барыусы З. В.**: Һәр бер баланың сығышына һокланып карап торҙом.

Гөлнәзирә, беҙҙең башҡорт төркөмдәрендә бик күп таланттар бар икән.

**1 – се алып барыусы Г. Р.**: Әйе шул, Зимфира. Беҙҙең жюриларға бик ауырға тура килерме икән. Жюрилар һәр бәйгесенең сығышын баһалар өсөн уларға ваҡыт бирәйек.



*Жюри ағзалары сыға. Алып барыусылар  балалар менән уйын уйнайҙар.*

**1– се алып барыусы Г. Р.**: Кескәй дуҫтарым, ҡунаҡтар ә һеҙ әкиәттәр яратаһығыҙмы.

**2 – се алып барыусы** : Земфира, бөгөн бында әкиәт һөйөүселәр йыйылған да инде.




**1– се алып барыусы Г. Р.**: Әйҙә улайһа һеҙең менән уйнап алайыҡ. Был **уйын "Ниндәй әкиәттән?** "тип атала.

**2 – се алып барыусы** .: Беҙ һеҙгә берәй сюжет әйтәбеҙ, ә һеҙ ниндәй әкиәттән булыцын билдәләргә тейешһегеҙ.

**1– се алып барыусы Г. Р.**: "Йомро –йомро йомғағын эҙләп һарыҡ көтөүсеһе янына килеп сыҡҡан" (Гөлбикә)

**2 – се алып барыусы** .: "Арыҫлан бик асыуланып ҡоҙоҡҡа ҡараған икән, унда үҙе кеүек бер арыҫланды күргән" ( Арыҫлан менән ҡуян )

**1– се алып барыусы Г. Р.**: "Сығырмын, сығырмын, сыҡһам күҙең ҡашың ҡан булыр!..." (Төлкө менән ҡуян)




**2 – се алып барыусы**: Тағы ла бер әкиәттән өҙөк. "Айыу өйгә инеүе булған өй емерелеп киткән. Ә йәнлектәр төрлө яҡҡа йәшенеп бөткән ти" (Тирмәкәй) Рәхмәт дуҫтарым. Әкиәттәрҙе бик яҡшы беләһегеҙ икән.




**2– се алып барыусы З. В.**: Жюриларҙың эше бөткәнсә беҙ уйнап алайыҡ. Ә беҙ һеҙҙең менән ял итеп алайыҡ. **Музыкаль күнегеүҙәр.**

**1 – се алып барыусы Г. Р.**: Жюриға һүҙ бирәйек. Еңеүселәрҙе алҡышлап оҙатайыҡ.

. Көй башлана **<u>“Бәхет ҡуласаһы”</u>** йыры башлана, балалар бейеп сығалар, ҡулдарында шарҙар. Өсөнсө куплет башланыу менән бәйгелә ҡатнашҡан балалар әкиәт геройҙары менән берлектә сәхнәгә сығалар ярымтүңәрәк яһап торалар. Һәр баланың ҡулында шар.